Ф. Ғ. Ишкарина, Л. А. Юлдашбаева

Әтиләү

1-се класс уҡыусылары өсөн телмәр үҫтереү буйынса эш дәфтәре

1-се дәрес

Тексты тыңлағыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.

Өн һәм хәрефтәр.

Беҙ һүҙҙәр донъяһында йәшәйбеҙ. Һүҙҙәрҙе беҙ әйтәбеҙ, яҙабыҙ, уҡыйбыҙ, ишетәбеҙ. ***Мәктәп*** тип әйтһәк, беҙ өндәр ярҙамында уларҙы әйтәбеҙ һәм ишетәбеҙ. Өндәр ***тартынҡы*** һәм ***һуҙынҡы*** була. Ошо өндәрҙе уҡыр, яҙыр өсөн беҙ хәрефтәрҙе ҡулланабыҙ. Хәреф – өндөң тамғаһы. Иҫеңдә ҡалдыр! Өндәрҙе беҙ әйтәбеҙ һәм ишетәбеҙ. Хәрефтәрҙе беҙ яҙабыҙ һәм күрәбеҙ.

1. Нимә ул өн?
2. Нимә ул хәреф?
3. Һүҙҙәрҙе ҡабатлағыҙ.



мәктәп



китап




уҡыусы




уҡытыусы

4. Һүрәтте буяғыҙ.



5. Өлгө буйынса юлдарҙы тултырып яҙығыҙ.



2-се дәрес

Тексты тыңлағыҙ.


Алфавит.

Хәреф – өндөң тамғаһы. Хәрефтәр йәшәгән өй алфавит тип атала. Бында һәр хәрефтең үҙенең урыны бар. Башҡорт алфавитында ***42 хәреф***. Уларҙың 33 хәрефе рус алфавиты хәрефтәре. ***9 хәреф башҡорт өндәрен белдергән хәрефтәр***.


1. Нимә ул алфавит?
2. Башҡорт алфавитында нисә хәреф?
3. Башҡорт өндәрен белдергән нисә хәреф бар?
4. Хәрефтәрҙе ҡарап сығығыҙ. Нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн хәрефтәр төрлө төҫтә бирелгән?

Аа	Бб	Вв	Гг	Ғғ	Дд	Ҙҙ	Ее	Ёё
Жж	Зз	Ии	Йй	Кк	Ҡҡ	Лл	Мм	Нн
Ң	Оо	Өө	Пп	Рр	Сс	Ҫ	Тт	Уу
Үү	Фф	Хх	Һһ	Цц	Чч	Шш	Щщ	Ъ
Ыы	Ь	Ээ	Әә	Юю	Яя			

5. Өлгө буйынса юлдарҙы тултырып яҙығыҙ.



6. Хәрефтәрҙе буяғыҙ.




3-сө дәрес

Тексты тыңлағыҙ.


Кәмәлә.

1. Айрат менән Зилә һыу буйына киттеләр. 2. Улар кәмәгә ултырҙылар. 3. Айрат ишкәктәрҙе ишә. 4. Балалар икенсе ярға йөҙөп килде. 5. Айрат Зиләгә ярға төшөргә ярҙам итте. 6. Балалар ҡайтырға сыҡты.

1. Текста нимә тураһында һүҙ бара?
2. Малайҙың исеме кем?
3. Айрат һыу буйына кем менән китте?
4. Ҡайһы һүрәткә ниндәй һөйләм тура килә? Түңәрәктәр эсенә тейешле һандарҙы яҙып сығығыҙ.



5. Хәрефтәрҙе өлгөгә ҡарап матур итеп яҙығыҙ.



6. Текстан ***Әә*** херефен табып, аҫтына ***ҡыҙыл*** ҡәләм менән һыҙығыҙ.

7. Шаҡмаҡтар эсенә тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып яҙығыҙ. Текстан шул һүҙҙәрҙе табып аҫтына һыҙығыҙ.

к□м□г□ ишк□кт□рҙе

4-се дәрес.


Тексты тыңлағыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.

1. Булат менән Гүзәл урманға китте. 2. Улар үҙҙәре менән кәрзиндәр алдылар. 3. Балалар бәшмәк йыялар. 4. Балалар терпене осратты. 5. Улар терпене кәрзингә һалдылар. 6. Балалар ҡайтырға сыҡты.

1. Текста нимә тураһында һүҙ бара?
2. Балалар үҙҙәре менән нимә алалар?
3. Урманда балаларға нимә осрай?
4. Тексҡа исем биреген.
5. Аҙаҡҡы һөйләмдә ***һүҙынҡыларҙың*** аҫтына ***ҡыҙыл*** ҡәләм менән һыҙығыҙ.
6. Ҡайһы һүрәткә ниндәй һөйләм тура килә? Түңәрәктәр эсенә тейешле һандарҙы яҙып сығығыҙ.



7. Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур итеп яҙығыҙ.



5-се дәрес.

Тексты тыңлағыҙ.


Ҡошсоҡтар.

1. Малайҙар ҡыуаҡ араһында оя таптылар. 2. Ояла ҡош балалары бар ине. 3. Малайҙар шым ғына ситкә китте. 4. Күп тә үтмәй уларҙың әсәһе осоп килде. 5. Ул балаларын ашатты. 6. Ҡошсоҡтар ашанылар ҙа йоҡлап киттеләр.

1. Текста нимә тураһында һүҙ бара?
2. Малайҙарға исем ҡушығыҙ.
3. Текста ***к*** хәрефен табып аҫтына ***зәңгәр*** менән һыҙығыҙ.
4. Ҡайһы һүрәткә ниндәй һөйләм тура килә? Түңәрәктәр эсенә тейешле һандарҙы яҙып сығығыҙ.



5. Хәрефәрҙе өлгөгә ҡарап матур итеп яҙығыҙ.



6. Шаҡмаҡтар эсенә тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып яҙығыҙ. Текстан шул һүҙҙәрҙе табып аҫтына һыҙығыҙ.


□ош □ошсо□тар

6-сы дәрес.

Текстты тыңлағыҙ.



1. Таңһылыу нимә ярата?
2. Таңһылыуҙың әсәһе ни өсөн табип саҡырта?
3. Тексҡа исем биреген.
4. Текста булған тартынҡыларҙы табып аҫтына ***зәңгәр*** ҡәләм менән һыҙығыҙ.
5. Хәрефтәрҙе өлгөгә ҡарап матур итеп яҙығыҙ.



6. Шаҡмаҡ эсенә тейешле хәрефте ҡуйып яҙығыҙ. Текстан шул һүҙҙе табып аҫтына һыҙығыҙ.

ту□дырма

7. Мәҡәлде иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.


Һаулыҡ – ҙур байлыҡ.

7-се дәрес.

Текстты тыңлағыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.



1. Ҡыҙҙың исеме нисек?
2. Һәҙиә ҡурсағын нимә менән һөрттө?
3. Ҡыҙ ҡурсаҡҡа ниндәй күлдәк кейҙерә?
4. Текстан ***h*** хәрефтәрен табып аҫтына ***зәңгәр*** ҡәләм менән һыҙығыҙ.
5. Тексҡа исем биреген.
6. Хәрефтәрҙе өлгөгә ҡарап матур итеп яҙығыҙ.



7. Шаҡмаҡ эсенә тейешле хәрефте ҡуйып яҙығыҙ. Текстан шул һүҙҙе табып аҫтына һыҙығыҙ.

□абын

8. Мәҡәлде иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.


Кыҙлы йорт – наҙлы йорт.

8-се дәрес.

Тексты тыңлағыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.



1. Текста кем тураһында һүҙ бара?
2. Көндөҙ Айҙар ни эшләй?
3. Айҙар өйгә эшен ҡасан эшләй?
4. Текстан ***ҙ*** хәрефтәрен табып аҫтына ***зәңгәр*** ҡәләм менән һыҙығыҙ.
5. Тексҡа исем биреген.
6. Хәрефтәрҙе өлгөгә ҡарап матур итеп яҙығыҙ.



7. Мәҡәлде иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Сәләмәт тәндә – сәләмәт рух.

9-сы дәрес.

Тексты тыңлағыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.

1. Ҡырмыҫҡа сыбыҡ тапты. 2. Ямғыр башланды. 3. Ҡырмыҫҡа япраҡ аҫтында йәшенде. 4. Кояш сыҡты. 5. Ҡырмыҫҡа юлын дауам итте. 6. Ул сыбыҡты ҡырмыҫҡа иләүенә алып ҡайтты.


1. Ҡырмыҫҡа нимә тапҡан?
2. Ул ямғырҙан ҡайҙа ҡасҡан?
3. Нисек уйлайһығыҙ, ҡырмыҫҡа сыбыҡты ни эшләтә?
4. Ҡырмыҫҡа йәшәгән өй нисек атала?
5. Ҡайһы һүрәткә ниндәй һөйләм тура килә? Түңәрәктәр эсенә тейешле һандарҙы яҙып сығығыҙ.



6. Тексҡа исем биреген.
7. Шаҡмаҡ эсенә тейешле хәрефте ҡуйып яҙығыҙ. Текстан шул һүҙҙе табып аҫтына һыҙығыҙ.

ҡырмы□ҡа

8. Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур итеп яҙығыҙ



10-сы дәрес.

Тексты тыңлағыҙ. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.




1. Текст нимә тураһында? Тексҡа исем бирегеҙ.
2. Тейен нимә тапҡан?
3. Тубырсыҡты тейен ҡайҙа ҡуя?
4. Текстың дүртенсе һөйләмен күсереп яҙығыҙ.

5. Текста бөтә тартынҡы өндәрҙең аҫтына ***зәңгәр*** ҡәләм менән һыҙығыҙ.
6. Шаҡмаҡ эсенә тейешле хәрефте ҡуйып яҙығыҙ. Текстан шул һүҙҙе табып аҫтына һыҙығыҙ.

а□ас

7. Хәрефтәрҙе өлгөгә ҡарап матур итеп яҙығыҙ.



8. Мәҡәлдең мәғәнәһен аңлат, иҫеңдә ҡалдыр.

Йәйге бер көн йылды туйҙыра.

11-се дәрес.

Текстыҡ тыңлағыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.



Бесәй балаһы уянды.

Йыуынып алды.

Асыҡҡас килеп һөт эсте.


Бесәй балаһы йомғаҡ менән уйнай башланы.

Ул епкә уралды.

Өлфәт менән Гөлсирә уға ярҙам итте.

1. Текста нисә һөйләм?
2. Текста нимә тураһында һүҙ бара?
3. Бесәй балаһына ниндәй исем бирер инегеҙ?
4. Ә һеҙҙең бесәй балаһы бармы? Ул ниндәй?
5. Тексҡа исем биреген.
6. Текстың өсөнсө һөйләмен ижектәргә бүлеп күсереп яҙығыҙ.

7. Хәрефтәрҙе өлгөгә ҡарап матур итеп яҙығыҙ.



8. Шаҡмаҡ эсенә тейешле хәрефте ҡуйып яҙығыҙ. Текстан шул һүҙҙе табып аҫтына һыҙығыҙ.

h□т

12-се дәрес.

Тексты уҡы. Һорауҙарға яуап бир.

Булат походҡа йыйынды. Ул өйҙән сыҡты. Булат урман буйлап йөрөнө. Ул урманда палатка ҡорҙо. Булат усаҡ яҡты. Кис ул өйөнә ҡайтып етте.

1. Текст нимә тураһында?
2. Һыҙыҡтар урынына тейешле һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеп яҙығыҙ.



3. Тексҡа исем бирегеҙ.
4. Текстан бишенсе һөйләмде күсереп яҙығыҙ.

5. Мәҡәлде уҡығыҙ, ижектәргә бүлеп күсереп яҙығыҙ, мәғәнәһен аңлатығыҙ.

Хәрәкәттә – бәрәкәт.

13-сө дәрес.

Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.



1. Ракета ҡайҙа оса? Ракетала кемдәр оса?
2. Тексҡа исем биреген
3. Һүрәттәргә иғтибарлап ҡарағыҙ, шаҡмаҡтар эсенә тейешле һүҙҙе яҙығыҙ. Һүҙҙәрҙең ***баҫымын*** билдәләгеҙ.



4. Һүҙҙе матур итеп яҙығыҙ, баҫымын билдәләгеҙ.

йыһан

5. Беренсе һөйләмде күсереп яҙығыҙ. Һәр һүҙҙең баҫымын билдәләгеҙ.

6. Йомаҡтың яуабын табығыҙ.

Айға тиһәң, айға осор,
Ҡайҙа ҡушһаң, шунда төшөр.

14-се дәрес.

Текстты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.



1. Текст нимә тураһында?
2. Текстан ***кем? нимә?*** һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙығыҙ.
3. Текстан малайҙың һәм бесәйҙең исемдәрен күсереп яҙығыҙ. Ни өсөн был һүҙҙәр ҙур хәреф менән яҙыла?

4. Тексҡа исем биреген.
5. Мәҡәлде уҡығыҙ, күсереп яҙығыҙ, мәғәнәһен аңлатығыҙ.

Тырышҡан кеше ас ҡалмаҫ.

6. Йомаҡтың яуабын табып яҙығыҙ.

Ҡанаты бар — оса алмай,
Күккә табан ҡарамай,
Йондоҙҙарҙы һанамай,
Ҡоро ерҙә тора алмай.

15-се дәрес.

Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.

1. Айыуҙың тыуған көнө. 2. Ул бәлеш бешерә. 3. Айыуға ҡунаҡҡа дуҫтары килде. 4. Улар айыуға шарҙар, уйынсыҡтар бүләк итте. 5. Дуҫтар шат. 6. Айыу дуҫтарын бәлеш менән һыйланы.

1. Ҡайһы һүрәткә ниндәй һөйләм тура килә? Түңәрәктәр эсенә тейешле һандарҙы яҙып сығығыҙ.



2. Кемдең тыуған көнө?
3. Текстан ***нимә?*** һәм ***нимәләр?*** һорауына яуап биреүсе һүҙҙәрҙе табып аҫтына һыҙығыҙ.
4. Айыуҙың тыуған көнөнә ҡунаҡҡа кемдәр килә? Һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.
5. Айыуҙың дуҫтары уға нимә бүләк итә?
6. Тексҡа исем биреген.
7. Мәкәлде уҡығыҙ, күсереп яҙығыҙ, мәғәнәһен аңлатығыҙ.

Төймә лә бүләк, дөйә лә бүләк.

16-сы дәрес.

Йомаҡтың яуабын табып яҙығыҙ.

Дүрттер уның аяғы.
Түбәһендә ҡолағы;
Илдән-илгә еткерер,
Таштан ҡаты тояғы.



Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.

Ҡолонсаҡ.

Булат көн һайын атаһы янына йөрөй. Уның атаһы ат ҡарай. Бер көндө Булат Шоңҡар исемле ат янында бәләкәй генә ҡолонсаҡ күрҙе. Ул бик шатланды. Ҡолонсаҡҡа Ҡарасай тип исем ҡушты. Булат Ҡарасайҙы көн һайын ҡараны.

1. Текст нимә тураһында?
2. Текстан малайҙың исемен табып күсереп яҙығыҙ.
3. Булат ҡолонға ниндәй исем ҡуша? Текстан һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.
4. Булаттың атаһы кем булып эшләй?
5. Ҡарасайҙың әсәһенең исеме нисек? Һөйләмде табып уҡығыҙ.
6. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Топ-топ-топ итә,
Тауға менһә, һоп итә.
Минең атым елдерә,
Бар ергә лә өлгөрә.

А.Йәғәфәрова

7. Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, мәғәнәһен аңлатығыҙ.

Ат сапҡанда беленер.
Ат тешенән билгеле, егет түшенән билгеле.
Ҡош һауала, ат тауҙа, егет яуҙа һынала.

17-се дәрес.

Йомаҡтарҙың яуаптарын табығыҙ.



Йүгереклән йөрөр ул,
Лəү-лəү итеп өрөр ул,
Мал-тыуарҙы ҡыуыр ул,
Өйгə һаҡсы булыр ул.

Шып-шым баҫып йөрөй ул,
Сыҫкандарҙы тота ул.
Һөт эсə лə рəхəтлəнеп,
Мейес башында ята ул.

Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Дуҫтар.

Муйнаҡ исемле эт менән Бүлəк тигән бесəй йəшəгəн. Улар дуҫ булған. Бер көндө Муйнаҡ дуҫын ҡунаҡҡа саҡырған. Өҫтəлгə ит, бауырһаҡ, һөт теҙгəн. Бүлəк күстəнəскə бəлеш, төрлө ризыҡтар алып килгəн. Эт менəн бесəй оҙаҡ дуҫ булғандар.

1. Текст нимə тураһында?
2. Эттең исеме нисек? Текстан табып яҙығыҙ.

3. Бесəйҙең исеме нисек? Текстан табып яҙығыҙ.

4. Муйнаҡ бесəйҙе нимə менəн һайлаған?
5. Мəҡəлде уҡығыҙ, мəғəнəһен аңлатығыҙ.

Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын.

18-се дәрес.



Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Өфө.

Өфө – Башҡортостандың баш ҡалаһы. Ул ҙур һәм матур. Өфөлә күп ҡатлы йорттар һалына. Урамдарҙа троллейбустар, трамвайҙар һәм автобустар йөрөй. Бында төрлө заводтар, фабрикалар, кинотеатрҙар, парктар күп. Өфөнө уратып Ағиҙел йылғаһы аға. Ағиҙел ярында Салауат Юлаев һәйкәле бар. Баш ҡалабыҙ йылдан-йыл матурлана.

1. Текст нимә тураһында?
2. Өфө урамдарында ниндәй транспорттар йөрөй? Һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.
3. Өфөнө уратып алған йылғаның атамаһын яҙығыҙ.
4. Түбәндәге һүрәттәрҙә бирелгән иҫтәлекле урындарҙы яҙығыҙ? Был урындар тураһында нимәләр беләһегеҙ?





5. Шиғырҙы тасуири уҡы.

Тау башында балҡый бер ҡала,
Ул ҡала Өфө тип атала.
Яҡтыраҡ яна йондоҙҙары,
Матурҙар егет һәм ҡыҙҙары.

Р. Янбулатова

19-сы дәрес.



Йомаҡтың яуабын табығыҙ.

Ҡыҙарып беште - ергә төштө.

Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Йомарт алмағас.

Урманда ҙур алмағас үҫкән. Бер саҡ уның янынан терпе үтеп барған. Бер алма терпенең арҡаһына төшкән. Терпе уны алып ҡайтҡан. Балалары алманы бик яратҡан.

Терпе алмағасҡа көн һайын барған. Ул ҡышҡа шулай аҙыҡ йыйған.

1. Текст нимә тураһында?
2. Алмағас ҡайҙа үҫә? Текстан һөйләмде табып күсереп алығыҙ.

3. Терпе алманы ни эшләтә?
4. Текст нисә өлөштән тора? Һәр өлөштөң темаһын билдәләгеҙ.
5. Алмағас һүҙенең яһалышын аңлатығыҙ. Был һүҙгә оҡшаш һүҙҙәрҙе яҙығыҙ?

6. Шиғырҙы тасуири уҡы.

Мин терпе, энәле йомғаҡ,
Һеҙгә ҡунаҡҡа килдем.
Дуҫтарға күстәнәс тип,
Энәмә алма элдем.

Ә.Таһирова



20-се дәрес.

Йомаҡтың яуабын табығыҙ.

Аҡыллы сәсә барыр,
Аҡылһыҙ йыя барыр.



Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.

Был беҙҙең мәктәп. Ул ҙур һәм матур. Беҙҙең мәктәптә китапхана, ашхана, тамаша залы бар. Ашханала ашнаҡсы апайҙар беҙгә тәмле аштар әҙерләй. Китапханала ҡыҙыҡлы китаптар бик күп. Тамаша залында төрлө саралар уҙа.

Был беҙҙең башҡорт теле кабинеты. Кабинетта интерактив таҡта, ноутбук, аҡбур таҡтаһы, китап кәштәләре, парталар һәм ултырғыстар бар. Уҡытыусы яңы тема аңлата. Уҡыусылар иғтибар менән тыңлай.

1. Текст нимә тураһында?
2. Мәктәптә нимәләр бар?
3. Китап, ручка, ҡайсы һүҙҙәре менән һөйләм төҙөгөҙ.

Мин _____ уҡыйым.
Уҡыусы _____ менән яҙа.
Илүҙә _____ менән ҡырҡа.

4. Башҡорт теле кабинетында нимә бар?
5. Уҡытыусы нимә эшләй? Текстан һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.

6. Текскә исем биреген.
7. Һүҙҙәр менән тейешле ялғауҙарҙы тоташтырығыҙ.



китап	ҙар
юйма	тар
дәфтәр	лар
ҡәләм	ҙәр
альбом	дәр
буяу	дар

21-се дәрес.

Йомаҡтың яуабын табып яҙығыҙ.

Йәй ҙә егет, ҡыш та егет,
Йөрөй йәшел елән кейеп.

Тескты уҡығыҙ. Һорауҙаға яуап бирегеҙ.

Шыршы.

Шыршы йәйен дә, ҡышын да йәшел була. Шыршы энәле. Энәләре оҙон, ҡаты. Ҡышын шыршы байрамға килә.

1. Текст нимә тураһында?
2. Текстан ***ниндәй?*** һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе күсереп яҙығыҙ.

3. Шыршы байрамға ҡасан килә? Текстан һөйләмде табып күсереп алығыҙ.

4. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Ниндәй? һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙығыҙ.

Шыршы матур, шыршы матур,
Шыршы һәр саҡ йәм-йәшел.
Энәләрен ҡоймай бер ҙә,
Һәр ваҡытта йәп-йәш ул.

Ҡ. Даян

22-се дәрес.

Йомаҡтарҙың яуабан табығыҙ.




Йәйен һоро, ҡышын аҡ,
Уға шулай яҡшыраҡ .

Ялҡын кеүек ялт-йолт итә,
Ҡапыл һикереп китә.
Йәйе уның эштә үтә,
Ҡышын сәтләүек сиртә.

Тексты уҡы, һорауҙарға яуап бир.

Бына көҙ үтте. Һалҡын ҡыш килде. Тейен ағас ҡыуышына йәшенде. Ҡуян шыршы аҫтында ҡарға сумды. Бер саҡ тейен тышҡа ҡараны. Ул ҡуянды күрҙе, ләкин таныманы. Ҡуян аҡ тун кейгән ине.

1. Текст нимә тураһында?
2. Текста ниндәй миҙгел һүрәтләнгән?
3. Текста ***ниндәй?*** һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе табып аҫтына һыҙығыҙ.
4. Тейен ҡуянды ни өсөн таныманы? Һөйләмде табығыҙ һәм күсереп алығыҙ.





5. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Танышайыҡ, мин – ҡуян,
Урман эсендә оям.
Бары тик оямда ғына
Үҙемде батыр тоям.

Г.Юнысова

23-сө дәрес.

Тексты уҡы. Һорауҙарға яуап бир.



1. Текст нимә тураһында? Тексҡа исем биреген.
2. Яңы йыл байрамы ҡасан була?
3. Балалар яңы йыл байрамына нисек әҙерләнә? Һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.

4. Текста ***ни эшләне? ни эшләй?*** һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙығыҙ.
5. Һыҙыҡтар урынына тейешле һүҙҙәрҙе яҙығыҙ.

Балалар _____ _____,

_____, *шиғырҙар* _____. .

6. Шиғырҙы тасуири уҡы.

Ҡуян менән Ҡыш бабай
Икеһе лә аҡ ҡына.
Ҡыш бабай ҡурҡаҡ түгел,
Ҡуян ҡурҡаҡ саҡ ҡына.

К. Даян

24-се дәрес.

Йомаҡтың яуабын табып яҙығыҙ.



Бар урманды дауалай,
Ағастарҙы таҙарта.
Ҡышҡыһын да ял белмәй,
Тукылдарға ярата.

Тексты уҡығыҙ. Һорауҙаға яуап биреген.

Тумыртҡа.

Урман ситендә ағас. Ағаста тумыртҡа. Ул ағастан ҡорт сүпләй. Тумыртҡа ағасты дауалай. Ул - урман докторы.

1. Текста ниндәй ҡош тураһында һүҙ бара?
2. Тумыртҡа ағастарҙы нисек дауалай?
3. Тумыртҡаны тағы нисек атайҙар? Был турала яҙылған һөйләмде күсереп алығыҙ.

4. Түбәндә бирелгән һүҙҙәргә һорау биреген.
   ағас -
   ағаста -
   ағастан -
   ағасты -
5. *Ағас* һүҙен тағы нисек үҙгәртеп була?
6. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Килеп ҡунһа тумыртҡа,
Һәр ағас ҡорто ҡурҡа.
Дауаларға тотона,
Һылтанмай көйө юҡҡа.

З.Утәғолова

25-се дәрес.

Йомаҡтарҙың яуабын табығыҙ.



Хужанан да, эттән дә
Һис тә ҡурҡып тормай.
Ем һипкәйнем ҡаҙҙарға,
Килеп ҡунды ... .

Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Таһир өйҙәме?

Турғай тәҙрә төбөнә ҡунды. Тырнаҡтары менән тәҙрәгә йәбеште. Өй эсенә күҙ һалды. Таһир өйҙәме икән? Турғай тағы тағараҡ янына килде. Ул шулай Таһирҙы көтә. Малай көн һайын ҡоштарға ем һибә. Ҡоштар Таһирға рәхмәтле.

1. Текст нимә тураһында?
2. Текстан һорау һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.
3. Ни өсөн турғай Таһирҙы көтә? Текстан һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.
4. Ни өсөн ҡоштарға тағараҡтар эшләргә кәрәк?
5. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.



Уяндым бөгөн иртә –
Кемдер тәҙрәне сиртә.
Туҡ-туҡ-туҡ килә турғай,
Миңә ни һөйләй, йырлай?
Тышта һыуыҡ, ҡар, тиҙер,
Сыҡ, миңә ем һал, тиҙер.

С. Әлибай

26-сы дәрес.

Йомаҡтың яуабын табып яҙығыҙ.



Ағас түгел — япраҡлы,
Тун түгел — тегелгән.

Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Китап – белем шишмәһе. Китап уҡыған кеше белемле була. Китапты ярат, һаҡла! Китап биттәрен бысратма. Уны тышлап тот. Китапҡа яҙма. Ул оҙаҡ йылдар һаҡланһын.

1. Текста нимә тураһында һүҙ бара?
2. Өсөнсө һөйләмдә тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатығыҙ. Һөйләмде күсереп яҙығыҙ.

3. Һеҙ ниндәй китаптар уҡырға яратаһығыҙ?
4. Текста бирелгән мәҡәлде күсереп яҙығыҙ.

5. Бирелгән һүҙҙәргә һорау бир.



ярат –

һаҡла –

бысратма –

яҙма –

6. Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, мәғәнәһен аңлатығыҙ.

Китап – белем шишмәһе.
Китапһыҙ йорт – ҡошһоҙ урман.

27-се дәрес.

Йомаҡтарҙың яуабын табығыҙ.



Бер ҡарттың ун ике улы бар,
Шуларҙың өсәүһе һоро көпө кейә,
Өсәүһе йәшел күлдәк кейә,
Өсәүһе һары сәкмән кейә,
Өсәүһе аҡ тун кейә.

Тесты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.

Йыл миҙгелдәре.

Бер йылда дүрт миҙгел бар. Һәр миҙгелдә өс ай. Ҡыш айҙары: декабрь, ғинуар, февраль. Яҙ айҙары: март, апрель, май. Йәй айҙары: июнь, июль, август. Көҙ айҙары: сентябрь, октябрь, ноябрь.

1. Текст нимә тураһында?
2. Бер йылда нисә миҙгел? Миҙгелдәрҙең атамаларын күсереп яҙығыҙ.
3. Һәр миҙгелдә нисә ай?
4. Өлгө буйынса һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ. *Мин яҙ миҙгелен яратам.*

Мин яратам.
Мин яратам.
Мин яратам.

5. Мәҡәлде уҡығыҙ. Мәғәнәһен аңлатығыҙ.

Көҙ бай булма, яҙ бай бул.

28-се дәрес.



Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап биреген

Төҫлө япраҡтар.

Көҙ. Һуҡмаҡ буйлап терпе килә. Аяҡ аҫтында япраҡ ҡыштырлай. Урман тыныс. Уҫаҡ янында терпе туҡтап ҡалды. Ерҙә япраҡтар туҙып ята. Ҡып-ҡыҙыл, һап- һары булып улар уттай балҡый.

— Ҡыҙыма алып ҡайтайым әле, туйғансы уйнар, — тип уйланы терпе. Бер нисә япраҡты тиҙ генә сәнсеп алды. Аҡ ҡайын янынан үткәндә һап-һары япраҡтар күрҙе. Уларын да энәгә ҡаҙаны.

Күрһәгеҙ ине heҙ терпене! Төрлө япраҡ күтәреп, терпе килә. Ҡыҙылы ла, һарыһы ла, йәшеле лә, көрәне лә бар. Әйтерһең, терпе бәләкәс ҡыҙына йәйғор алып ҡайтып килә.

А. Йәғәфәрова.

1. Текста ниндәй миҙгел тураһында һүҙ бара?
2. Автор көҙгө япраҡтарҙы нимәләр менән сағыштыра? Һөйләмдәрҙе табып күсереп яҙығыҙ.

3. Терпе япраҡтарҙы кемгә алып ҡайта? Һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.

4. Текст нисә өлөштән тора? Өсөнсө абзацтың беренсе һөйләмен күсереп яҙығыҙ.

29-сы дәрес.

Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.

Алдаҡсы йондоҙҙар.

Ҡояш болот аҫтына инде. Яй ғына ҡар яуа башланы. Хәлимә, ҡыуанып: ,

— Хәлим, ҡара әле, күктән йондоҙҙар төшә. Бына – бейәләйемдә! — тине.

Хәлим ҡараны. Ысынлап та, күҙгә саҡ ҡына күренерлек аҡ йондоҙҙар бар ине.

— Йондоҙҙарҙы әсәйемә индереп күрһәтәйем әле! — тип Хәлимә өйгә йүгереп инеп китте.

— Әсәй, бына йондоҙ тоттом, — тип ҡысҡырҙы, ишектән ингәс тә.

— Ниндәй йондоҙ ул?

— Бына!

Хәлимә аптырап китте. Ҡараһа, бейәләй һыртындағы йондоҙҙар юҡ.

— Әсәйемә барыбер индереп күрһәтермен. Хәлим, ишекте ас. Мин тиҙ генә инермен. Ҡасырға өлгөрә алмаһындар.

Улар тағы өйгә инделәр. Тик барыбер йондоҙҙар күҙ асып йомған арала юғалалар ҙа ҡуялар.

Ф. Иҫәнғолов

1. Текст нимә тураһында?
2. Текста ниндәй миҙгел тураһында һүҙ бара?
3. Балаларҙың исемдәрен күсереп яҙығыҙ.

4. Йомаҡтың яуабын табығыҙ.



Шәкәр тиһәң — шәкәр түгел,
Һөт тә түгел — үҙе аҡ;
Мамыҡ тиһәң — мамыҡ түгел,
Йә, был нимә? Уйлап тап.

30-сы дәрес.

Йомаҡтың яуабын табығыҙ.



Ҡар иреп, ер күренер,
Һайрар ҡоштар ҙа килер,
Йәшел үләндәр үҫер,-
Был ниндәй ваҡыт етер?

Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Яҙ хәбәрселәре.

Айҙар иртәнсәк мәктәпкә килгәндә, ағас башында ултырған ҡара ҡарғаларҙы күреп ҡалды. Айҙар класҡа килеп ингәс тә:
— Һөйөнсө! Ҡара ҡарғалар килгән! — тип әйтте. Класташтары яҙ, ҡоштар тураһында һөйләргә, бәхәсләшергә тотондо. Уҡытыусы Сәлимә апай балаларҙы тынысландырҙы:
— Балалар, ысынлап та, яҙ башланды, — тип башланы. — Ҡара ҡарғалар килгән. Улар — яҙ хәбәрселәре. Беҙҙең Тыуған илебеҙ иҫ киткес ҙур. Яҙ килгәнен төрлө ерҙә төрлө ҡоштар хәбәр итә. Шунан уҡытыусы яҙын беҙҙең яҡтан төньяҡҡа китеүсе ҡоштар тураһында һөйләне:
— Яҙ көнө һары турғай, ҡыҙылтүш, аҡ өкө беҙҙә ҡыш сығалар ҙа төньяҡҡа китәләр. Һеҙҙең күҙ алдығыҙҙа йөрөгән ала ҡарға ла беҙҙеке түгел. Ул — төньяҡ ҡошо. Улар яҙын беҙҙән китә, ә көньяҡтан беҙҙекеләр үҙебеҙгә ҡайта. Быны һиҙмәйбеҙ ҙә, сөнки бөтә ала ҡарғалар ҙа бер төҫтә.
Ҡоштарҙың ҡайтыуында ла билдәле бер тәртип бар. Тәүгеләре булып беҙҙән иң аҙаҡ осҡандары ҡайта.

Факиһа Туғыҙбаева



1. Текста ниндәй миҙгел тураһында һүҙ бара?
2. Яҙын беҙҙең яҡҡа ниндәй ҡоштар ҡайта?
3. Төньяҡҡа китеүсе ҡоштарҙы текстан яҙып ялығыҙ.
4. Төньяҡ, көньяҡ һүҙҙәренең яҙылышын аңлатығыҙ.
5. Ҡоштар тураһында һеҙ тағы нимәләр беләһегеҙ?

31-се дәрес.

Йомаҡтың яуабын табығыҙ.

Көндәр бигерәк эҫелер,
Еләктәр ҙә бешәлер.
Көн дә беҙ һыу инәбеҙ,-
Ниндәй ваҡыт? Әйт әле.



Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап биреген

Йәй

Бына көтөп алған йәй етте. Бөтә тирә-яҡ аҡ, зәңгәр, һары, ҡыҙыл төҫтәге сәскәләргә күмелде. Күбәләктәр, бал ҡорттары сәскәнән сәскәгә оса. Туғайҙа ер еләге беште.

Йәйге каникулды балалар түҙемһеҙләнеп көтә. Каникул ваҡытында улар урамда уйнайҙар, ҡояшта ҡыҙыналар, һыу инәләр, балыҡ тоталар.

Йәй көнө баҡсала эштәр күбәйә. Емеш-еләккә һыу һибергә, түтәлдәрҙе утарға кәрәк. Йәйге бер көн ҡышты туйҙыра, ти халыҡ мәҡәле.

1. Текста ниндәй миҙгел тураһында һүҙ бара?
2. Йәйге каникулда балалар нимә эшләй? Текстан һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.

3. Йәй көнө баҡсала ниндәй эштәр башҡарыла? Текстан һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.

4. Тирә-яҡ, емеш-еләк һүҙҙәренең яҙылышын аңлатығыҙ.

32-се дәрес.



Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.

Мостай олатай.

Мостай Кәрим – Башҡортостандың халыҡ шағиры. Уның шиғырҙарын, хикәйәләрен балалар яратып уҡый. Шағирҙың әҫәрҙәре күп телдәргә тәржемә ителгән.

Мостай Кәримдең әҫәрҙәре буйынса фильмдар төшөрөлә. Беҙ класс менән “Һеңлекәш” фильмын ҡараныҡ. Оҙаҡламай режиссер Айнур Асҡаровтың “Өс таған” фильмына барабыҙ.

Республикабыҙҙа Мостай Кәрим исеме менән бәйле урындар күп. Өфө халыҡ-ара аэропорты, Милли йәштәр театры Мостай Кәрим исемен йөрөтә.

1. Текст кем тураһында?
2. Мостай Кәрим тураһында нимәләр беләһегеҙ?
3. Мостай Кәрим әҫәрҙәре буйынса төшөрөлгән фильмдарҙы яҙығыҙ.
4. Башҡортостан Республикаһында Мостай Кәрим исеме менән бәйле урындарҙы атап яҙығыҙ.
5. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.



Ер шарының картаһына
Ҡараһаң яҡшы ғына,
Башҡортостан шул картала
Бер япраҡ саҡлы ғына.
Эйе япраҡ, аҡ ҡайындың
Бер япрағы ни бары.
Ә ҡайыны бөйөк Рәсәй,
Шундай йәшел, юғары.

М. Кәрим

33-сө дәрес.




Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.

Утта янмай, һыуҙа батмай.

Миңлеғәли Шайморатов – Рәсәй Федерацияһының геройы. Ул Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан. Шайморатов 112-се Башҡорт кавалерия девизияһының командиры була. Миңлеғәли үҙенең Керчь ҡушаматлы аты менән дуҫ була.

Миңлеғәли Шайморатов Ҡырмыҫҡалы районы Биштәкә ауылында тыуған. Генерал Шайморатовҡа Өфө ҡалаһында урынлашҡан Совет майҙанында һәйкәл ҡуйғандар.

1. Текст кем тураһында?
2. Миңлеғәли Шайморатов кем булған? Ул ҡайҙа тыуған?
3. Миңлеғәли Шайморатовтың аты тураһында яҙылған һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.



4. Миңлеғәли Шайморатовтың исеме нисек мәңгеләштерелгән?
5. Текста бирелгән яңғыҙлыҡ исемдәрҙе табып, уларҙың аҫтына һыҙығыҙ.
6. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.



Башҡорттар китте һуғышҡа,
Оҙатып ҡалды күк Урал;
Ат уйнатып, алдан бара
Шайморатов генерал.

Шайморатов яу ҡырында
Дошмандарҙы көл иткән;
Утта янмай, һыуҙа батмай,
Һай, батыр ҙа ир икән.

К. Даян

34-се дәрес.



Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап биреген.

Беҙҙең Рәми.

Рәми Ғарипов – Башҡортостандың халыҡ шағиры. Ул тыуған ил, туған тел тураһында бик күп шиғырҙар яҙған.

Рәми Ғарипов Салауат районы Арҡауыл ауылында тыуған. Шағир уҡыған Өфө ҡалаһындағы беренсе мәктәп-интернат хәҙер Рәми Ғарипов исемен йөрөтә. Унда республиканың иң тырыш, иң рухлы балалары уҡый.

1. Текст кем тураһында?
2. Кем ул Рәми Ғарипов? Текстан һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.

3. Кем ул шағир?
4. Рәми Ғарипов ҡайҙа тыуған? Текстан һөйләмде табып күсереп яҙығыҙ.

5. Шағир уҡыған мәктәп хәҙер нисек атала?
6. Рәми Ғариповтың “Сыйырсыҡ” шиғырҙын тасуири уҡығыҙ.



Сыйырсыҡ, сыйырсыҡ!
Ояңдан осоп сыҡ!
Оҡшаһа был өйөң,
Түгелһен моң-көйөң!..

Ҡошсоғом сыҡты ла,
Ҡанатын ҡаҡты ла,
Һоҡланды ояға,
Таң ҡалды донъяға.

Ул һайрай мең телдә,
Булғанға күп илдә.
Дәртләнә, һөйөнә
Ҡайтҡанға өйөнә.

Р. Ғарипов

35-се дәрес.



Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Халыҡ батыры.

Салауат Юлаев – халыҡ батыры. Ул Салауат районы Тәкәй ауылында тыуған. Салауат батыр бәләкәйҙән үк батыр, зирәк бала булып үҫә. Ул өс йәшендә атта һыбай йөрөй. Ун дүрт йәшендә беренсе тапҡыр айыу ала.

Салауат Юлаев –сәсән. Ул шиғырҙар яҙа. Йырҙар сығарып үҙе матур итеп йырлай. Салауат батыр оҫта ҡурайсы була.

1. Текст кем тураһында?
2. Кем ул Салауат Юлаев. Текстан һөйләмдәрҙе табып күсереп яҙығыҙ.

3. Салауат Юлаев ҡайҙа тыуған? Текстан һөйләмде табып күсереп алығыҙ.

4. Текст нисә өлөштән тора? Һәр өлөштөң темаһын билдәләгеҙ.
5. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.



Ай, Уралым, Уралым,
Күгәреп ятҡан Уралым!
Нурға сумған түбәһе,
Күккә ашҡан Уралым!
Һине маҡтай йырҙарым,
Һине данлай йырҙарым.

С. Юлаев

6. Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, мәғәнәһен аңлатығыҙ.

Батыр бер үлә, ҡурҡаҡ ҡырҡ үлә.
Батыр егет-ил күрке.